*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Белем һәм тәрбиә усағы

## Ләмәҙтамаҡ урта мәктәбенә — 90 йыл

**Мәктәптең визиткаһы:**
**Башҡортостан Республикаһы**
**Мәсетле районы**
**Ләмәҙтамаҡ муниципаль**
**дөйөм белем биреү мәктәбе**

Мәктәпкә 1917 йылда нигеҙ һалынған һәм ул быйыл үҙенең 90 йыллыҡ юбилейын билдәләй.

Үҙенең бай тарихын XIX быуат аҙағында эшләп килгән мәҙрәсә нигеҙендә башлаған. Тап ошо ерлектә XX быуат башында ике баҫҡыслы мәктәп булараҡ асыла. 1935 йылда ул дөйөм белем биреү мәктәбенә әүерелде. Уҡытыу башҡорт телендә алып барыла.

Ләмәҙтамаҡ урта мәктәбе Мәсетле районындағы иң тәүге һәм ҙур мәктәптәрҙең береһе һанала. Уҙған быуаттың 70-се йылдарына тиклем бында райондың 30-лаған ауылынан балалар килеп уҡыған.

Үҙенең быуатҡа яҡынлашып килгән ғүмерендә ул 3 меңдән ашыу егет һәм ҡыҙға оло тормош юлына әҙерлекле аяҡ баҫырға ярҙам иткән.

*Укытыусылар коллективы, 1947 йыл*



Төрлө йылдарҙа Ләмәҙтамаҡ урта мәктәбен директорҙар Г.Абдуллин, М.Байгилдин, Х.Абраров, Х.Ниғмәтуллин, Ф.Ғәбитова, М.Фәйезов, С.Ҡылысбаева, З.Сибәғәтов, Ф.Ҡылысбаев, С.Закиров етәкләй. Әлеге көндө мәктәп коллективы менән Башҡортостан Республикаһы мәғариф отличнигы Әнүәр Лотфулла улы Ғәлимов етәкселек итә.



*Ләмәҙтамак мәктәбенең тәүге мөғәллимәһе Мәүсуфа Ҡылысбаева*

Ләмәҙтамаҡ муниципаль дөйөм белем биреү мәктәбе тулы булмаған урта һәм тулы урта белем биреү программалары буйынса эшләй, шулай уҡ ауыл хужалығы өсөн бик кәрәкле булған киң профилле тракторсы-машинист һөнәренә лә өйрәтә.

Мәктәптең эшмәкәрлеге уҡыу программаларын ныҡлы үҙләштереү нигеҙендә дөйөм мәҙәни кимәлде үҫтереүгә, уҡыусыларҙы йәмғиәткә, тормошҡа яраҡлаштырыуға, уларҙа патриотизм, хеҙмәткә, кеше хоҡуҡтарына һәм азатлыҡтарына ихтирам, тирә-яҡ мөхиткә һөйөү тәрбиәләүгә йүнәлтелгән.

Әлеге ваҡытта мәктәптә егерме алты уҡытыусы һәм тәрбиәсе эшләй, уларҙың уныһы — беренсе, уныһы — икенсе категорияға, шул иҫәптән биш уҡытыусы Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы тигән юғары исемгә эйә. Хәҙерге көндә бында 168 уҡыусы белем ала. Мәктәп Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Чехословакиялағы ”Бейек Татр” партизан отряды командиры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Вафа Әхмәҙуллин исемен йөрөтә.

Берсә тыныс, берсә ярһый биреп аҡкан Ләмәҙ йылғаһы мул һыулы талғын Әйгә килеп ҡушылған ерҙә тарихы быуаттар төпкөлөнә барып тоташҡан Ләмәҙтамаҡ ауылы урынлашҡан. Ауыл халҡының йыш ҡына:

”Беҙ Мәсетле, беҙ Мәсетле
Йәмле Әй буйҙарынан”, —

тип йырлауы бәләкәйҙән күңелгә ҡунған.

Ошо ауылда тыуып үҫкән егеттәр һәм ҡыҙҙар шаулашып-гөрләшеп Ләмәҙтамаҡ мәктәбенә йөрөп уҡый. Йөрөп уҡый тиеүемдең сере шунда: Ләмәҙтамаҡ урта мәктәбе үҙе күрше Ҡотош ауылының осонда, бейек тау итәгендә урынлашҡан. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында Мәсетле районында дүрт ауылда ғына урта мәктәп булып, башҡорттарҙың күбеһе Ләмәҙтамаҡҡа килеп уҡый торғайны. Ауылдары 5—6 саҡрымда булғандары һалҡын ҡыштарҙа ла, ямғырлы көҙҙәрҙә лә йөрөп уҡыуҙы өҫтөн күрһә, 40—50 саҡрымдан килгәндәр интернатта йәки фатирҙа йәшәй ине. Күрәһең, белем алырға ынтылыш бик көслө булғандыр, улар араһынан бик талантлы шәхестәр үҫеп сыҡкан. Мәҫәлән, Юлай Жыянғәле улы Байрамғолов — техник фәндәр докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының Инженер академияһы академигы, рационизаторлыҡ һәм уйлап табыу өлкәһендәге ҡаҙаныштары өсөн уға СССР-ҙың атҡаҙанған уйлап табыусыһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уйлап табыусыһы тигән абруйлы исемдәр бирелгән.

Филология фәндәре докторы Нәжибә Хәйерзаман ҡыҙы Мәҡсүтова лә ошо мәктәпте тамамлаған, башҡорт тел ғилеменә лайыҡлы өлөш индергән танылған ғалимәләрҙең береһе.

Мәктәп исемен йөрөткән Вафа Әхмәҙуллиндың улы, медицина фәндәре кандидаты Роберт Вафа улы Әхмәҙуллин оҙаҡ йылдар Башҡортостан Республикаһының "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһын, байтаҡ йылдар республика шифаханалары идаралығын етәкләне.

Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Йәүһәрә Санбаш ҡыҙы Санбашева үҙенең уңышлы педагогик эшмәкәрлеге менән дан ҡаҙанды, Йонос урта мәктәбендә уҡыусыларға башҡорт теленең матурлығын, камиллығын төшөнөргә ярҙам итте.

Журналист Ризван Закирхан улы Хажиев үҙенең үткер, фәһемле мәҡәләләре, очерктары, тыуған яғының арҙаҡлы шәхестәре хаҡындағы йөкмәткеле китаптары менән киң танылыу яулаған.

Мәктәпте тамамлаусылар араһынан медицина өлкәһендә эшләүселәр ҙә, уҡытыусы профессияһын үҙ итеүселәр ҙә бихисап. Мәҫәлән, Фәрит Ғәлихан улы Каев район үҙәге Оло Ыҡтамаҡ янындағы ҡарағай урманына һыйынып ултырған "Әсә һәм бала" пульмонологик шифаханаһын етәкләне, әле лә шунда эшләй. Земфира Мөхәмәҙи ҡыҙы Әхмәҙиева ла оҙаҡ йылдар ошо шифаханала балаларҙы дауалай. Район үҙәгендәге дауаханала эшләгән табиптарҙың да күбеһе — Ләмәҙтамаҡ мәктәбен тамамлаусылар.

Ләмәҙтамаҡ мәктәбендә уҡыусыларға төплө белем һәм яҡшы тәрбиә биреү өсөн тәрән йөкмәткеле, маҡсатҡа ярашлы күп эштәр башҡарыла. Бында һәр предметҡа иғтибар көслө. Әйтәйек, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса район, республика олимпиадаларында мәктәп уҡыусылары һәр саҡ призлы урындар яулап килә. Әлбиттә, был — иң тәүҙә Салауат Юлаев ордены кавалеры Мәрйәм Муллабай ҡыҙы Ҡолмөхәмәтованың

*Мәктәптең бөгөнгө коллективы*






*Советтар Союзы Геройы Ҡотдос Латипов менән осрашыу*

һәм юғары категориялы уҡытыусы, Башҡортостандың мәғариф отличнигы Гөлназ Радик ҡыҙы Йәнтүриналарҙың ижади һәм емешле эш һөҙөмтәһе.

Мәғариф алдынғыһы, юғары категориялы уҡытыусы, рус теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡытҡан Рәхимә Шаһит ҡыҙы Ғәлимованың уҡыусылары ла һынатмай, район, республика күләмендәге бәйгеләрҙә призлы урындар яулай.

Мәктәп директорының тәрбиәүи эштәр буйынса урынбаҫары Фирҙәүес Фердинанд ҡыҙы Ҡотлоева һәм уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары Ләйсән Фларис ҡыҙы Ғәлимовалар уҡыу һәм тәрбиә процесы һөҙөмтәле, йөкмәткеле булһын өсөн, уҡытыусылар менән уҡыусыларҙың берҙәм тырышлығына өлгәшеүгә күп көс һала.

Мәктәп тупһаһына аяҡ баҫҡан малайҙар һәм ҡыҙҙарҙың күңелендә белем алыуға теләк, ынтылыш уятыуҙа башланғыс синыф уҡытыусыларының хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Флорида Рәхимйән ҡыҙы Тәүәкәлова, Лилиә Рәжәп ҡыҙы Ҡотлоева, Алһыу Әбүбәкер ҡыҙы Дилмөхәмәтова, Сәлимә Барый ҡыҙы Якуповалар үҙҙәрен ошо өлкәлә оҫталар итеп танытты. Башланғыс синыф уҡытыусыларының район берекмәһе кәңәшмәләре, нигеҙҙә, Ләмәҙтамаҡ урта мәктәбендә үтә, сөнки бында өлгө булырлыҡ, тәжрибә уртаҡлашырҙай уҡытыусылар эшләй.

37 йыл математика фәнен уҡытҡан Гөлнәзирә Тәбриз ҡыҙы Әхмәҙуллина, уҡытыусылар Сәриә Сәбиғиәр ҡыҙы һәм Заһир Зариф улы Фәтиховтар уҡыусыларҙа теүәл фәндәргә һөйөү уята, заман талаптарына ярашлы дәрестәре менән өлгө күрһәтә. Мәктәп тамамлаусыларҙың байтағы артабан юғары уҡыу йорттарына математика, физика фәндәре буйынса имтихандарҙы уңышлы тапшыра икән, был — ошо уҡытыусыларҙың хеҙмәт емеше.

Ләмәҙтамаҡ мәктәбе уҡыусылары балаҫ, таҫтамал һуғырға, сигеү эштәренә лә маһир. Шуға күрә уларҙың хеҙмәт емештәре район, республика кимәлендә уҙған бәйгеләрҙә призлы урындар яулай. Былар — барыһы ла технология уҡытыусыһы Нурания Фәсхетдин ҡыҙы Ғилметдинованың тырышлығы һөҙөмтәһе. Ул уҡыусыларҙың күңелендә ма-



*Укыусылар ”Зарница” уйынында*

турлыҡҡа, камиллыҡҡа ынтылыш, боронғо ҡомартҡыларға ихтирам, хеҙмәткә һөйөү тойғоһо тәрбиәләй. Ул етәкселек иткән уҡыусыларҙың хеҙмәт бригадаһы 2006 йылда республикала II урын яуланы һәм Бишбүләк районында уҙған йомғаҡлау бәйгеһендә ҡатнашты.

2007 йыл Башҡортостан Республикаһы өсөн мөһим ваҡиғаларға бай. Мәктәп коллективы Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуына 450 йыл тулыуға арналған сараларҙа әүҙем ҡатнаша. Мәктәптә гәзиттәр, альбомдар бәйгеләре, үҙешмәкәр сәнғәт коллективтарының ярыштары йөкмәткеле уҙҙы. ”Шәжәрә” байрамының да уңышлы үтеүен билдәләп үтеү кәрәк. 37 уҡыусы үҙенең нәҫел ағасын өйрәнеп, шәжәрәһен төҙөп, мәктәп уҡыусылары алдында сығыш яһаны. Мәктәптә еңеп сығыусылар район бәйгеһендә уңышлы сығыш яһаны һәм

*Буласак бейеүселәр*



”Шәжәрәһен иң яҡшы белеүсе” номинацияһында VI синыф уҡыусыһы Алһыу Әхмәҙуллина еңеү яуланы.

Мәктәп уҡыусылары сәнғәт өлкәһендә лә һынатмай. Мәҫәлән, быйыл мәктәптең ”Байрам” бейеү ансамбле (етәксеһе — Адлер Йәһүҙин) Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй составына инеүенең 450 йыллығына арналған бәйгелә призлы урынға лайыҡ булды.



*Мәктәп музейы тарихи комартҡыларға бик бай*

Мәсетле яҡтары элек-электән үҙенең ҡумыҙсылары менән дан тота. Данлыҡлы ҡумыҙсы Роберт Заһретдиновтың оҫталығын артабан дауам итеүсе маһир ҡумыҙсы Миндеғәфүр Зәйнетдинов Ләмәҙтамаҡ мәктәбен тамамлаған. Әле лә мәктәптә ҡумыҙ сиртеүселәр байтаҡ. Быйыл ҡыш Мәсетле районында ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәрҙең республика бәйгеһе уңышлы үтте һәм унда беҙҙең ҡумыҙсылар дипломдар яуланы.

Район үҙәге Оло Ыҡтамаҡ мәҙәниәт йортонда уңышлы эшләп килгән ”Әй” бейеү ансамблен дә беҙҙең мәктәпте тамамлап, артабан Мәскәү хореография академияһында оҫталыҡ серҙәрен өйрәнгән Илфат Йосопов етәкләй.

Мәктәптең тыуған яҡты өйрәнеү музейы хаҡында айырым әйтеп китеү урынлы. Быйыл көҙ музей асылыуға ун йыл тула. Ошо ваҡыт эсендә бында Ләмәҙтамаҡ, Ҡотош, яҡын-тирәләге башҡа ауылдар, район тарихы буйынса бай материал тупланған. Музейға килеүселәр тарихи ҡомартҡылар, ошо мәктәпте тамамлап, төрлө өлкәләрҙә матур уңыштар яулаған яҡташтары менән дә таныша. Музей буйынса экскурсияларҙы уҡыусылар үткәрә, бөтә был эшкә бар күңелен һалған Гөлшат Ризуан ҡыҙы Хәйбуллина етәкселек итә. Йылдар, замандар, быуаттар осрашҡан музей һәр кемде үҙенә әйҙәп, киләсәккә саҡырып тора.

Эйе, йылдар үтә тора. Әле Бөйөк Ватан һуғышына тиклем ағастан һалынған бер ҡатлы мәктәп урынында хәҙер ике ҡатлы бина балҡып ултыра. Унда белемгә эйә булыу өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған. Шуға ла Ләмәҙтамаҡ уҡытыусылары һәм уҡыусылары һынатмай. Әйткәндәй, быйыл район уҡытыусыларының август кәңәшмәһе ошо мәктәптә үтәсәк. Был иһә һәр кемгә тағы ла яуаплылыҡ өҫтәй.

— Ләмәҙтамаҡтар һынатманы һәм һынатмаясаҡ, — ти Ләмәҙтамаҡ урта мәктәбе директоры Әнүәр Лотфулла улы Ғәлимов. — Беҙ матур традицияларҙы һаҡлап, яңыларын уҡыу-тәрбиә процесына индерергә тырышабыҙ.

Берҙәм, әүҙем һәм тырыш коллективҡа һәм уларҙың уҡыусыларына уңыштар юлдаш булыуын теләйек.